# *Балалар телмәренең үҫеш мәсьәләләре*

Телмәргә эйә булыу процесы ике йәштән биш йәшкә тиклем етез темптар менән бара. Тап ошо арауыҡта баланың мейеһендә күпселек грамматик формалар ныҡлы һеңешеп ҡала.

Мәғлүи булыуынса, бер йәштән алып балаларҙың һүҙ байлығы берәмектәр менән иҫәпләнә; икенсе йәштең аҙағына – 50 – 300 һүҙ, ә өсөнсө йәштең аҙағына 1000 һүҙгә барып етә. Тимәк, бер йыл эсендә бала үҙенең һүҙлек составын өсләтә арттыра, унан һүң һүҙ йыйыу әкренерәк бара. Ошо уҡ хәл грамматик формадарҙы йыйыуға ла ҡағыла.

Ҡайһы осраҡта бала телмәрендә рәүеш тә ҡылымға әйләнә. Ул ниндәйҙер хәл-ваҡиғаны булғанынан да артығыраҡ күрһәтеү маҡсатында артыҡлыҡ дәрәжәһе ялғауын ҡуллана. Мәҫәлән, тиҙерәгерәк, күберәгерәк, әҙерәгерәк, ҡыҫҡағыраҡ, сәнскәгерәк. Был һүҙҙәр башҡорт телендә ҡулланылған оҙонораҡ, бәләкәйерәк, матурыраҡ, тәмлерәк, татлыраҡ кеүек һүҙҙәргә ауаздаш.

Бала телмәрендә исемдәрҙән барлыҡҡа килгән ҡылымдар ҙа йыш осрай: мәҫәлән, хыял-хыялланыу, маймыл-маймылланыу, бәпәй-бәпәйләнеү, әртис-әртисләнеү. Был һүҙҙәр ололарҙың телмәрендә лә сағылып ҡала. “тағы, тағы” тип йөҙәткән балаһын, әсәһе “тағындама” әле, тип туҡтата.

Балалар телмәрендә әйберҙең тауышына, эш-хәрәкәтенә оҡшатып уйлап сығарылған һүҙҙәр ҙә байтаҡ. Мә:әлән: туҡ-туҡ, тып-тып, пип-пип, тек-тек, без-без һ.б. Был бигерәк тә бала яңы һөйләшә башлаған осорға тура килә.

Баланың  оҡшатыу рефлекстары бик көслө. Беҙҙең телмәр өҫтөнән даими контроль яһау балаға үҙенең телмәрен үҫтерергә мөмкинлек бирә. Бал дүрт

йәштәр тирәһендә ололарҙан ишеткән айырым һүҙҙәрҙе генә түгел, ә тотош фразаларҙы анализлай башлай. Сөнки ул йәштәге балаларҙың һүҙҙәрҙе һәм һүҙ төҙөлөшөнөң мәғәнәһен зиһенгә алыу һәләте ололарҙыҡына ҡарағанда үткерерәк була.

Баланы дөрөҫ тәрбиәләү һәм унын телмәрен үҫтереү – ололарҙың бурысы. өйҙәге, балалар баҡсаһындағы һәм уны тартып алған даирәләге атмосфера балаға нығ тәьҫир итә. Шуға күрә ҡала балаларының телмәре ауыл балаһының телмәренән, балалар баҡсаһына йөрөгән баланың телмәре өйҙә тәрбиәләнгәнекенән бер ни тиклем айырылап тора. Алда әйтеп үткәнемсә, балалар бик һиҙгер була, ололар иғтибар итмәгән нәмәләрҙе күреп, тойоп тора. Балаларҙың телмәре матур, бай булһын өсөн, унын телмәрен үҫтереүҙә ата-әсәләрҙең, тәрбиәселәрҙең, уҡытыусыларҙың роле ҙур. Баланың бер ваҡытта ла бер нәмә ҡаршыһында ла юғалып ҡалмауын, һәр ситуацияла лә кәрәкле һүҙҙәрҙе таба белеүен беҙ бик яҡшы беләбеҙ һәм хуплайбыҙ. Беҙ баланың уйлап сығарған, телмәрендә ҡулланған һүҙҙәргә иғтибарлы булырға тейешбеҙ. Беҙ ул уйлап сығарған неологизмдарға һоҡланып ҡарай алабыҙ, ләкин ни тиклем баланың һүҙе оҡшаһа ла, ваҡытында уны төҙәтеү – беҙҙең бурысыбыҙ. Ата-әсәләрҙең, тәрбиәселәрҙең, уҡытыусыларҙың иң төп бурысы – баланың телмәрен ололар телмәренә яҡынайтыу. Бала телмәрендәге хаталарҙы төҙәткәндә тәрбиәсе бик һаҡ булырға, баланы теге йәки был һүҙҙе килтереп сығарған тәбиғи юлдарҙы кәртәләмәҫкә тейеш. Бала телмәрен, унын үҙенсәлеген өйрәнеп, тәрбиәселәр үҙҙәренең “һәр балаға айырым иғтибар” алымын камиллаштыра баралар.

# Хәтер – “иң бөйөк мөғжизә”

Кешене борондан борсоған һорауҙар араһында иң ҡатмарлыларынан булып мейе эшмәкәрлеге тураһындағы, йәғни организмдың элек-электән психик тап аталған функцияһы һәм уның айырым сағылыштарының береһе булған хәтер тураһындағы мәсьәлә тора. Хәтер – мейенең айырыуса мөһим үҙенсәлектәренең береһе, психик эшмәкәрлектең үҙ-үҙенде тотоу, фекерләү. Аң һәм башҡа сағылыштары формалашҡан нигеҙе ул.

Хәҙерге ваҡытта барлыҡҡа килеү механизмы буйынса хәтерҙең ике төрөн айыралар: а) ҡыҫҡа ваҡытлы хәтер. Ул ҡуҙғыуҙың йомоҡ нейрон түңәрәктәрендә циркулцияһы менән характерлана һәм бер нисә минут һәм сикунд һаҡлана; б) оҙаҡ ваҡытлы хәтер күп көндәрҙән, айҙарҙан һәм хатта йылдарҙан һуң иҫкә төшөргә мөмкин.

Кешенең нимә хәтерләүенә бәйле хәтер сағылышының дүрт төрөн айыралар: 1) хәрәкәт хәтере (яҙма телмәргә, төрлө күнекмәләргә өйрәткәндә); 2) образлы хәтер (кешеләрҙең йөҙҙәрен, һүрәттәрҙе күҙ алдына килтерергә, тауыштарҙы, еҫтәрҙе иҫкә төшөрөргә ярҙам итә); 3) эмоциональ хәтер. Кешенең теге йәки был тойғолары, кисерештәре ошо хәтер арҡаһында һаҡлана; 4) телдән хәтер – уҡылған, ишеткән йәки үҙең әйткән һүҙҙәрҙе хәтерләү.

Хәтерҙең был төрҙәре үҙ-ара бәйләнгән, һәм шуға күрә информация хәтерҙең ике йәки күберәк төрө ҡатнашлығында иҫтә ҡалдырыла.

Хәтерләү көс һалмайынса барғанда ихтиярҙан (теләктән) тыш хәтер тиҙәр. ул мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа күҙәтелә һәм ҙур урын ала. Ирекле (үҙ теләге менән булған) хәтер мәктәп йылдарында үҫешә һәм 25 йәштәргә үҙенең ныҡ үҫешенә етеп, 50 йәштәргә тикелм һаҡлана. Артабан хәтер насарая башлай.

Дәрестәрҙә яңы материалды үҙләштергәндә ни тиклем күберәк хәтер төрҙәре ҡатнашһа, ул шул тиклем яҡшыраҡ һаҡлана. Бер үк информацияны күп тапҡыр ҡатбатлау хәтерзе күнектерә, яҡшырта. Хәтерҙе ни тиклем күберәк күнектерһәң, ул шул тиклем яҡшыра, шуға ла “ҡабатлау – уҡыуҙың әсәһе” тиҙәр.

Төп фекерҙәрҙе айырыу, пландар, схемалар, конспекттар, иллюстрациялар төҙөү – былар барыһы ла яңы информацияны хәтерләүҙе яҡшырта.

Бала өсөн, һәр  дәрес ғәйәт ҙур информация ағымы булғанлыҡтан, хәтерҙең төрҙәре һәм формалары менән дөрөҫ файҙалана белеү бик мөһим. Хәтерләүҙең төп ҡағиҙәләренә информацияны иғтибар менән тыңлау, һүрәттәр, һыҙмалар менән аралаштырыу,

һығымталар яһау һәм башҡалар инә. Хәтерҙе һәр ерҙә: өйҙә, транспортта, атлап барғанда күнектерергә мөмкин.